БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 337-341

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.063

УДК 811.512.141

**М. Ғ. Усманова**

*Башкирский государственный педагогический университет им. М. Акмуллы*
*ул. Октябрьской революции, 3-а, Уфа, 450008, Россия*
*E-mail: usmanova.minsylu@mail.ru*

# КИЛӘСӘК ЗАМАН ЯЛҒАУЫ -АР/-ӘР ТУРАҺЫНДА

В башкирском языкознании все еще существуют нерешенные вопросы. Один из них – аффикс будущего времени ***-ар/-әр***. Ученые А. М. Азнабаев, В. Ш. Псянчин считают, что аффиксы ***ар/-әр*** и ***-ыр/-ер*** имеют одинаковую смысловую нагрузку. В свою очередь, Ж.Г. Киекбаев пишет, что орфографически правильным надо считать форму слов ***етәр, беләр, тейәр*** вместо ***етер, белер, тейер***. Следует также отметить, что в большинстве тюркских языков, например, татарском, нугайском, хакасском, азербайджанском, туркменском, кумыкском, крымско-татарском, каракалпакском, казахском, узбекском, уйгурском (новоуйгурском), тувинском, якутском, чулымско-тюркском, шорском, киргизском, алтайском и др. языках аффикс ***-ар/-әр*** является нормой литературного языка.

*Ключевые слова:* тюркские языки, разговорная речь, башкирский язык, аффикс.

Башҡорт тел ғилемендә ҡапма-ҡаршы фекер тыуҙырған, йә әле һаман хәл ителеп бөтмәгән, йә иһә дөрөҫ билдәләнмәгән күренештәрҙең байтаҡ булыуы [Хажин, 2001, 181], халыҡ телендә киң ҡулланылған ҡайһы бер ялғауҙарҙың әҙәби телгә алынмайынса ҡалғаны тураһында [Ишбулатов, 1972, 133–134] әленән-әле яҙыла килә. Шуларҙың береһе башҡорт теленең грамматикаһына әҙәби норма итеп алынмаған билдәһеҙ киләсәк заманды белдергән – **-ар/-әр** ялғауы. Ул киләсәк заман сифат ҡылымын яһаусы ***-р*** ялғауы менән (варианттары – ***ыр/-ер, -ор/-өр)*** бер рәттә торорға тейеш.

***-ар/-әр*** ялғауы халыҡ телендә иркен йөрөй, әҙәби әҫәрҙәрҙә йыш осрай, халыҡ ижадында актив ҡулланыла. Был йәһәттән эпос, әкиәт, йыр, мәҡәлдәр һ.б. билдәһеҙ киләсәк заман ялғауының элекке хәлен, башҡорт телендә ни тиклем киң тотонолғанын күрһәткән хазина. Бына ул һүҙҙәр: *беләр, бирәр, баҫар, булар, быуар, ейәр, елғыуар, етәр, иҙәр, инәр, иҫәр, итәр, йолар, йөҙәр, йыуар, кейәр, китәр, күрәр, күсәр, киләр, ҡосар, ҡыуар, менәр, осар, өҙәр, сөйәр, сығар, табар, тейәр, тояр, төйәр, төшәр, түҙәр, түләр, тыуар, үбәр, үләр, үҫәр, үтәр, һөҙәр, һөйәр, эсәр, янар, быуар (йылан), һыубаҫар (туғай), тегәр(еп)* һ.б.

Бынан тыш ***-ар/-әр*** аффиксы антропонимдарҙа *(Һөй**әр**голов, Таңат**ар**, Таңғат**ар**, Бүл**әр** хан, Үл**әр**хан, Уғат**ар** батыр),* йондоҙлоҡ атамаларында *(Һыуғо**яр** - Һыуғо**йар**),* уртаҡлыҡ исемдәрҙә *(бөғ**әр**, һөй**әр**, һөй**әр**кә, сығ**ар**ылыш, таутиш**әр*** *–* үлән атамаһы*),* рәүештәр, сифаттар яһалышында урын алған.

Әйткәндәй, Ж. Ғ. Кейекбаев ҡайһы бер һүҙҙәрҙең, мәҫәлән, ***етәр***, ***беләр***, ***тейәр*** ошо рәүештә дөрөҫ булғаны тураһында фекерен әйтә, артынса уҡ ***етер, белер*** формалары дөрөҫ булмауын күрһәтә һәм түбәндәге миҫалдарҙы килтерә: “...мәҫәлән: *уғат**ар** батыр, ос**ар** тейен.* Был исемдәр *уғатыр батыр, осор тейен* рәүешендә яҙылмай. Ҡәтғи тыйыуҙы белдергән һәм ымлыҡҡа күскән ***етәр*** һүҙендә һәр ваҡыт ***-әр*** ялғауы әйтелә һәм яҙыла, мәҫәлән: ***Етәр****, егеттәр, ҡуйығыҙ*! (*Етер, егеттәр, ҡуйығыҙ* – дөрөҫ түгел.)” [Кейекбаев, 1983, 237].

*Көмөш кенә эйәр атҡа (ла)* ***тейәр,***
*Эйәкәйҙәре* ***белмәҫ,*** *ат* ***беләр.***
*Ир башҡайына ҡайғы төшһә,*
*Үҙ туғаны белмәҫ, ят* ***беләр. (Белер*** түгел – Ж.К.) [Кейекбаев, 1983, 217].

«Шуныһы ҡыҙыҡ, – тип яҙа телсе-ғалимдар Ә. М. Аҙнабаев менән В. Ш. Псәнчин, – йәнле һөйләү телендәге ҡайһы бер ҡылымдарҙа ***-ар/-әр*** ҡушылмалары, икенселәрендә ***-ыр/-ер*** аффикстары ҡулланыла. Мәҫәлән, *ал-**ыр,*** ләкин *саҡыр-**ар;*** *әйт-**ер***, ләкин *кил-**әр.*** Орфографияла был аффикстарҙың ***-ыр/-ер*** варианттары ғына ҡабул ителгән. Хәҙерге башҡорт телендә ***-ыр*** йәки ***-ар*** аффикслы ҡылымдарҙың заман күҙлегенән айырмаһы юҡ. Әйтәйек, ***әйтер*** һәм ***киләр*** формалары бер үк заманды белдерә». [Аҙнабаев, Псәнчин,1976, 121].

Билдәле булыуынса, төрки телдәренең күбеһендә, шул иҫәптән, татар телендә ***-р, -ыр/-ер, -ар/-әр***, нуғай телендә ***-р, -ар/-ер***, хакас телендә ***-ар/-ер, -ир***, әзербайжан телендә ***-ар/-әр***, төркмән телендә ***-ар/-ер***, ғағауыз телендә ***-р, -ар/-йр***, ҡумыҡ телендә ***-ар/-ер, ур/-уьр***, ҡырым-татар телендә ***-(а)р/-(е)р***, ҡарағалпаҡ телендә ***-р, -ар/-ер***, ҡаҙаҡ телендә ***-ар/-ер/-р***, үзбәк телендә ***-р, -ар***, уйғыр (яңы уйғыр) телендә ***-ар-әр***, тува телендә ***-ар***, яҡут телендә ***-ар/-ыыр,*** чулым-төрки телендә ***-ар/-йр,*** шор телендә ***-ар/-ер,*** ҡырғыҙ телендә ***-ар***, алтай телендә ***-р, -ар/-ер*** аффикстары *киләсәк заман* төшөнсәһен бирә, әҙәби тел нормаһы булып йөрөй [ТГ, 1997, 121; ГНЯ, 1973, 227; ГХЯ, 1981, 227-228; Языки .., 1966, 74, 101, 123, 202, 246, 312, 330, 351, 353, 379, 395, 415, 457, 476, 496, 514].

I. Артабан киләсәк заманды күрһәткән ***-р, -ар/-әр*** ялғаулы ҡылымдарға ҡылымдарға бер нисә миҫал килтерәбеҙ. Уларҙың ни тиклем ҡолаҡҡа ятыш икәненә, телде көйлө иткәненә, рифмаға ятып ҡына торғанына иғтибар итәйек (*миҫалдар алфавит буйынса*):

**беләр, киләр***:*
*Майҙаныма шул* ***киләр,***
*Батыр буһаң, ул* ***беләр***. ( “Урал батыр” эпосынан);

**бөтәр**: *Көн яманы* ***бөтәр***, *әҙәм яманы бөтмәҫ*. (Мәҡәл);

**булар:** *Әгәр дә ҡөдрәт мән ҡылса ҡәһәр,*
*Жуҡ* ***булар*** *ғалимдәге жанжа жануар* (М. Аҡмулла шиғырынан);

**етәр**: *Уның өсөн һүҙ ишетеп, халыҡ алдында абруй төшөрөп йөрөү* ***етәр***...
(З. Биишева); *Ярлыҡарҙар атайымды. Үҙе өсөн көрәшергә уның аҡылы ла, белеме лә, хәйләһе лә* ***етәр***. (М. Иҙелбаев);

**иҙәр, өҙәр**: *Ни тиһәң дә дәртле заман – типһәң тимер* ***өҙәрлек***, *һуҡһаң баҡыр* ***иҙәрлек*** *сағыбыҙ*. (Й. Солтанов);

**инәр**: ***Инәреңдән*** *алда,* ***сығарыңды*** *уйла*. (Мәҡәл);

**йөҙәр, түҙәр**: *Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын,*
*Икәү бергә нисек* ***йөҙәрбеҙ***.
*Икәү бергә нисек тә* ***йөҙәрбеҙ,***
*Айырылышһаҡ, нисек* ***түҙәрбеҙ***. (“Ағиҙел” йырынан);

**йыуар**: *Ямғырҙар яуһа, ер* ***йыуар***. (“Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы);

**кейәр, бирәр, һөйәр**:
*Беләҙегем, йөҙөгөм,*

***Кейәрем*** *әле үҙем.*

*Ятҡа* ***бирәр*** *әмәлем юҡ*

***Һөйәрем*** *әле үҙем.* (“Беләҙегем-йөҙөгөм” йырынан);

**көтәр**, **итәр**:

*Ил батырым, Хәмит, ир-егетем,*

*Һине онотмам, һағынып* ***көтәрмен****!*

*Тик еңеп ҡайт яуыз дошмандарҙы,*

*Ғүмер буйы гөлдәр* ***итәрмен****.* (Һ.Дәүләтшина)

**күрәр, үләр**: *Тәҡдир булһа,* ***үләрбеҙ,***

*Хаҡ яҙғанын* ***күрәрбеҙ****.* (“Буҙйегет” эпосы);

**күсәр, ҡыуар, тыуар**: *Болот та* ***күсәр****, ел* ***ҡыуар*** *–*

*Ер йөҙөндә үрт* ***тыуар.*** ( “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы);

**сөйәр**: *Ҡара ла ыласын ҡыу итһәм,*

*Шоңҡар һайлап* ***сөйәрмен****.* (“Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы);

**тояр, тыуар**: “*Теләһә ҡайҙа йөрөмәй, гел ҡалала йәшәргә ризалашһа, үҙендә мәсьүлиәт* ***тояр*** *һәм шиғырҙарын китап итеп сығарырға мөмкинлек тә* ***тыуар*** *ине”, – тип уйлап, Мөхәммәтсәлим Аҡмуллаға хат яҙҙы.* (Я. Хамматов);

**төшәр, үҫәр, иҫәр**:*Бәлки, Машканың эҙенә* ***төшәрмен****.* (Я. Хамматов);

*Гөл булһам,* ***үҫәр*** *инем,*

*Ел булһам,* ***иҫәр*** *инем.*

*Алма булһам, алдарыңа*

*Өҙөлөп* ***төшәр*** *инем.* (Йыр).

**түҙәр**: *Осрашырға нисә йылдар бар,*

*Нисек* ***түҙәрмен*** *һуң һағынмай.* (Йыр);

**түләр, үләр**: *Һалдат әйтә: Үлһәм, ни хәл итмәк кәрәк,* ***үләрмен,***

*Бик кәрәкһә, икене лә* ***түләрмен****.* (“Генерал ҡыҙын алған һалдат” әкиәте);

**тыуар**: *– Ҡадир хан ҡулда ғәйрәт бөтмәһен, ырыуҙан ырыҫ китмәһен өсөн, ҡанбабалар һынағанса, нәҫелде дауам итеүсе вариҫ батыр ирҙән* ***тыуар*** *ул, тип, ҡыҙын батырҙан ҡот йәйҙермәксе.* (С.Бәҙретдинов);

**үбәр**: *Һыҙылып киткән ҡара мыйыҡ,*

*Нисек* ***үбәрһең*** *ҡыйып.* (Таҡмаҡ).

**үҫәр***: Ҡарағай ҙа* ***үҫәр*** *ай йәм өсөн,*

*Бал ҡорттары* ***осар*** *бал өсөн.* (Башҡорт халыҡ йыры “Йәйләүлек”);

**һыубаҫар**: *Ғәҙәттә, ат инһә, күренмәй торған* ***һыубаҫар*** *сабынлыҡтар юҡҡа сыҡты.* (З.Биишева); Ерҙә йәшәү яңынан башлана; ташҡын ҡабат ***һыубаҫар*** төбәккә йәйелгән. (Р.Камалов);

**һөҙәр:** *Эсеңде тишә* ***һөҙәрмен****.* (Әкиәттән);

**эсәр, ҡосар**: *Таҙ тағы яуапһыҙ ҡалмаған:*

*– Айран бирһәң,* ***эсәрем,***

*Айланып һине* ***ҡосарым****!* (“Балҡантаҙ” әкиәте);

II. **-ар/-әр** ялғаулы ҡылымдарҙан яһалған *исемдәр*:

**елғыуар:** ***Елғыуар*** *тиҙ* ***тыуар*** *тигәндәй, башҡалары йәһәт кенә шунан үрсеп киткән.* (Р.Байымов); *... һәр хәлдә* ***елғыуар*** *егеткә оҡшамаған, эше күп ине, ахырыһы, ашыҡты.* (Д.Буләков);

**һөйәр**: «*Мин был һүҙҙәрҙе сирҡанып яҙам: һеҙҙең хәшәрәт, аҙғын ҡатынығыҙ үҙенең* ***һөйәре*** *менән ҡайҙалыр көньяҡҡа ҡасты», – тип яҙылғайны.* (Ә.Бикчәнтәев); *Уны элекке* ***һөйәркәһенә*** *йортҡа ингән икән тип тә һөйләнеләр.* (Х.Зарипов); *Һөймәҫемде* ***һөйәрем*** *һөйәремден һаҡына.* Әйтем*;*

III. *рәүеш:* **етәрлек**: *Ә беҙҙең уландар башлап йөрөүсе булыр. Насармы ни?! Оһолдары ла, теләктәре лә* ***етәрлек****, иншалла.* (И.Ноғоманов);

IV. *сифат:* **өҙәрем**: *Бик* ***өҙәрем*** *эшең булмаһа, унда-бында сығып китмәй тор, урап ҡайтышлай һуғылырмын, – тип китеп барҙы.* (Ф.Әсәнов);

**быуар**: *Әйтерһең, йәшелле-күкле* ***быуар*** *йылан борғалана-һырғалана тау-таш араһынан шыуыша ла шыуыша.* (Ғ.Хөсәйенов);

**ейәр, эсәр:** – *Эс, улым,* ***эсәр*** *һыуың,* ***ейәр*** *ризығың ошо ерҙә булһын.* (Т.Ғарипова);

**һөйәр**: *Бындай эштә айыҡ аҡыл, таҙа намыҫ,* ***эш һөйәр*** *ҡул кәрәк, тинеләр.* (И. Ғиззәтуллин);

***-ар/-әр*** аффиксы тотороҡло һәм тотороҡһоҙ һүҙбәйләнештәрҙә, фразеологик берәмектәрҙә һаҡланған:

***тегәреп*** – тегенеү өсөн ҡулдан иләнгән киндер еп.[БТҺ., т.1, 325].

***Еп өҙәрлек [тә] хәл ҡалмау*** фразеологик берәмеге һүҙлеккә ҡағиҙә буйынса ***өҙөрлек*** рәүешендә бирелһә лә [БТҺ., т.1, 325] халыҡ бик ныҡ хәлдән тайғанын ***еп өҙәрлек тә*** *хәл юҡ (ҡалманы),*тип әйтә.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, ***-ар/-ә*р** аффикслы *киләсәк заман* ҡылымы һәм башҡа һүҙ төркөмдәре башҡорт телендә иркен йөрөй. Тимәк, кешелә булған сифатты (булмышты) нәҫелдән-нәҫелгә күсерә торған элемент – ген (*кан*) – үҙенең функцияһын тулыһынса үтәй, халыҡ (*ырыу, нәҫел, зат, тоҡом*) ҡаны аша бар булмышын быуындан-быуынға тапшыра килә. Сөнки, күреүебеҙсә, халыҡ уны онотмаған, онотмай: олоһо ла, кесеһе лә, грамматикала уҡытҡанға ҡарап тормай, йәне-тәне, ҡаны ҡушҡанса һөйләй, яҙа, йырлай...

*Ҡанаттарым булһа, ос**ар** инем*

*Талғын елпеп тыуған яҡтарға,* тип йырлаған данлыҡлы башҡорт ҡурайсыһы Ишмулла Дилмөхәмәтов:

*Үҙәгемде өҙ**әр** инде,*
*Әйткән һүҙҙәре менән.*

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡ телендә, фольклор әҫәрҙәрендә иркен ҡулланылған ***-ар/-әр*** ялғауы башҡорт теленең грамматикаһында үҙ урынын алмаған. Уны грамматикала тергеҙеү халыҡ телен дөрөҫ күрһәтеү генә түгел, телдең матур, сағыу, тулы, моңло яңғырашын да кире ҡайтарыу ул. Үрҙә әйткәнебеҙсә, төрки телдәренең бөтәһендә тиәрлек **-ар/-әр** ялғауы әҙәби тел нормаһы итеп алынған. Тимәк, ул төрки телдәренә хас бер үҙенсәлек.

### Әҙәбиәт


Аҙнабаев Ә. М., Псәнчин В. Ш. Башҡорт теленең тарихи морфологияһы. (Сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 175 бит.

ГНЯ – Грамматика ногайского языка. Фонетика и морфология. Под ред. профессора Н. А. Баскакова. Черкесск, 1973. 320 с.

ГХЯ – Грамматика хакасского языка. Под ред. профессора Н. А. Баскакова. М.: Изд-во «Наука», 1975. 418 с.

Ишбулатов Н. Х. Хәҙерге башҡорт теле. (Әҙәби телдең нормалар системаһы). Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. 144 бит.

Кейекбаев Ж. Ғ., Ғәләмов А. А., Фәритов Х. С., Аҙнабаев Ә. М., Сәйетбатталов Ғ. Ғ. Башҡорт теле. Педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. 398 бит.

ТГ – Татарская грамматика. Том II. Морфология. Казан: Татарское кн. изд-во, 1997. 397 с.

Хажин В. И. Дөрөҫ һөйләйбеҙме? // Ватандаш, 2001. № 1. 181-183-сө бит.

Языки народов СССР. В пяти томах. Тюркские языки. Том 2. М.: Изд-во «Наука», 1966. С. 340-362.

**M. G. Usmanova**

*Bashkir State Pedagogical University named after M. Akmulla*
*st. October Revolution, 3-a, Ufa, 450008, Russia*
*E-mail:usmanova.minsylu@mail.ru*

**ABOUT THE FUTURE TENSE AFFIX-AR/ - ÄR**

Unresolved issues still exist in Bashkir linguistics. One of them is the affix of future tense **-ar / -är**. Scholars A.M. Aznabaev, V.Sh. Psyanchin believe that the affixes **ar / -r** and **-yr / -er** have the same semantic load. In turn, J.G. Kiekbaev writes that the spelling form *etär, bellär, teyär* instead of *eter, beler, teyer* should be considered correct spelling. It should also be noted that in most Turkic languages, for example, Tatar, Nugai, Khakass, Azerbaijan, Turkmen, Kumyk, Crimean Tatar, Karakalpak, Kazakh, Uzbek, Uyghur (Novoigur), Tuvan, Yakut, Chulym-Turkic, Altai and other languages the affix *-ar / -är* is the norm of the literary language.

*Key words:* Turkic languages, colloquial speech, Bashkir language, affix.

## References

Aznabaev A. M., Psyanchin V. Sh. Historical morphology of the Bashkir language (experience of comparative historical research). Ufa: Bashkir book publishing house, 1976. 175 p.

Grammar of The Nogai language. Phonetics and morphology. Under the editorship of Professor N. A. Baskakov. Cherkessk, 1973. 320 p.

Grammar of the Khakas language. Under the editorship of Professor N. A.Baskakov. Moscow: publishing house "Nauka", 1975. 418 p.

Ishbulatov N. H. Modern Bashkir language (the system of norms of the literary language). Ufa: Bashkir book publishing house, 1972. 138 p.

Kiekbaev Dz.G., Gallyamov A. A., Faritov H. S., Aznabaev A. M., Saitbattalov G. G. The Bashkir language. Textbook for teacher training colleges. Ufa: Bashkir book publishing house,1983. 398 p.

Tatar grammar. Vol.II. Morphology. Kazan: Tatar book publishing house, 1997. 397 p.

Khazhyn V. I. Are we Speaking correctly? // Compatriot, 2001. № 1. P. 181-183.

Languages of the USSR. In five volumes. Turkic languages. Volume 2. Moscow: Publishing house Nauka, 1966. P. 340–362.